*Миңниса БАҺУМАНОВА*

# Фән күгенең якты йондоҙо


*Фәнүзә Айытбай ҡыҙы Нәҙершина*

Фәнүзә апай Нәҙершинаны 70-се йылдарҙан бирле беләм. Минең диплом етәкселәренең береһе Ким Әхмәтйәнов ине, шуға күрә рецензия алыр өсөн Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтына барырға тура килде. Ишек төбөндә көтөп торам. Бер ваҡыт йыйнаҡ ҡына кәүҙәле бер апай ишектән килеп инде лә, телефонда һөйләшеп торған Нәжибә апай Мәҡсүтова менән иҫәнләшкәндән һуң, миңә иғтибар итте: "Һылыу, кемде көтөп тораһың?" Йомошомдо аңлаҡас, ул, киң йылмайып, Ким ағай ултырған бүлмәне күрһәтте һәм үҙ юлы менән китеп барҙы.

Китапханала эшләү дәүерендә тираж комиссияһы ағзаһы булдым. Китапхана исеменән төрлө ойошмаларға, учреждениеларға барып йөрөгәндә, институтҡа ла күҙ һалынды. Ул ваҡытта Фәнүзә апай менән артыҡ осрашып һөйләшергә тура килмәне, сөнки ул эшенә күмелә лә коридорҙа бик күренеп бармай, етмәһә, йыш ҡына экспедицияларға сығып китә. Минең дә үҙ йомошом менән уларҙы ғилми эштәренән бүлгем килмәй.

1972—1985 йылдарҙа 18 томлыҡ "Башҡорт халыҡ ижады" донъя күрҙе. Унның өс томы: "Йомаҡтар", "Мәҡәлдәр һәм әйтемдәр", "Риүәйәттәр һәм легендалар" — Фәнүзә Нәҙершинаның мәртәбәле хеҙмәте ине. Аҙаҡ был томдар, яңы материалдар өҫтәлеп, 12 томда рус телендә баҫтырылды. Ул китаптар ауыҙ-тел ижадын яратыусыларға ҙур бүләк булды. Һәр томдың баш һүҙе генә лә тотош ғилми монографияға тиң ине. Һылтанмалар, аҙ аңлайышлы һүҙҙәрҙән торған һүҙлектәр үҙҙәре генә лә ни тора! Халыҡ ижадын, тарихты, халҡыбыҙҙың көнкүрешен, ғөрөф-ғәҙәттәрен, мәҙәни үҙенсәлектәрен, тел байлығын өйрәнеүселәргә ҡиммәтле табыш. Берәүҙәр том һандарын ҡабат-ҡабат һыҙыҡ өҫтөнә алып ғорурланһа, икенселәре халҡыбыҙҙың аң һәм хәтер мөмкинлектәренә һоҡланыу ҡатыш ғәжәпләнеү белдерҙе.

Мин тормош иптәшем Аҫылғужа Баһумановтың балалыҡ дуҫы Мөнир Маннаповтар ғаиләһе менән Баймаҡта йыш аралаштым. Мөнирҙең бер туған апаһы Рәйсә Диярова шул тиклем йор, бай телле: һәр ваҡиғаға әйтеме йә мәҡәле әҙер генә тора. Тыңлап туйғыһыҙ матур һөйләшә. Мин Фәнүзә

Нәҙершина йоғонтоһонда Рәйсә апайҙан ишеткән ҡайһы бер мәҡәл-әйтемдәрҙе, һынамыштарҙы яҙып алғайным, һуңынан “Ватандаш” журналында, йыртма календарҙа баҫтырып сығарҙым һәм яҙмаларҙы ғалимәгә илтеп тапшырҙым.

Аҫылғужа “Башҡорт халыҡ ижады”н ентекләп уҡып, яңы һүҙҙәрҙе ҡыҙыл ҡәләм менән билдәләп барҙы, уларҙың һүҙлектәргә ингән-инмәгәнлеген теүәлләне, сеңләү, ҡобайырҙарҙың шиғри төҙөлөшө үрнәктәрен шиғырҙарында ҡулланды. Образлы, кинәйәле мәғәнәле шиғри юлдарға шул тиклем һоҡлана торғайны. Мин иһә үҙ яғымды ҡайырҙым. Икәүләшеп башҡорт халыҡ ижады ҡомартҡыларын паспортлаштырырға, йәғни эстәлеген башҡорт халҡы тормошона йәнәш ҡуйып, уның көнкүреш, фиғел байлығын, тарихи ынйыларын, ғөрөф-ғәҙәтен һ.б. һөҙөп сығырға хыялландыҡ. Мин ул теләгебеҙҙе, бик бәләкәй кимәлдә булһа ла, аҙаҡ тормошҡа ашырҙым. Ирем өлгөрмәне.

Республика хөкүмәтенең “Башҡортостан халыҡтарының фольклорын өйрәнеү, тергеҙеү һәм үҫтереү буйынса программа”һына нигеҙләнеп, Аҫылғужа Баһуманов тәҡдиме менән “Башҡорт халыҡ ижады” тупланмаһын яңынан баҫтырырға уйланылар, хатта уны 36 томға еткерергә килештеләр. Тарих, тел һәм әҙәбиәт институты ғалимдары бик күп дәреслектәр, монографиялар сығарырға ниәтләгәйне. Ошо юҫыҡта Фәнүзә апай Нәҙершина яңыртылған планды ғәмәлгә ашырыу өсөн риүәйәт һәм легендаларҙан (1997), мәҡәл һәм әйтемдәрҙән (2006), йомаҡтарҙан (2007) төҙөлгән 3 том баҫтырҙы. Фәнүзә апай туҡһанынсы йылдарҙа тәү башлап илебеҙ фольклористикаһында башҡорт ауыҙ-тел ҡомартҡыларын өс телдә нәшер итә башланы: башҡорт, урыҫ һәм инглиз телдәрендә. Ошо хеҙмәте менән үҙен генә түгел, башҡорт фольклорын донъя кимәленә сығарҙы. 2001—2008 йылдарҙа төрөк телендә донъя күргән легенда-риүәйәттәр, йомаҡ һәм әйтемдәрҙең иң күркәм үрнәктәре, башҡорт мифологияһына арналған ғилми мәҡәләләре быны тағы бер тапҡыр раҫлай.

Ғаиләбеҙҙә Башҡортостанға һәм башҡорт халҡына ҡағылған һәр яңы китапты һатып алырға тырышабыҙ, шунлыҡтан ғалимә менән күберәк уның хеҙмәттәре аша әңгәмәләштек тиһәм дә ярай. “Халыҡ һүҙе” (1983), “Башҡорт халыҡ риүәйәттәре һәм легендалары” (рус телендә,1985), “Халыҡ хәтере” (1986), Асылыкүл, Дим, Өршәк ауыҙ-тел, музыкаль ижад өлгөләре тасуирланған “Рухи хазиналар” (1995), “Йомаҡтар һәм әйтемдәр” (2006), “Риүәйәттәр һәм легендалар” китаптары ҡулдан төшмәне. Ул китаптар хәҙер китапхана фондтарында ла һанаулы ғына ҡалып килә.

Фәнүзә Нәҙершина афористик жанрҙарҙы, тарихи прозаны сағыштырып өйрәнеүе менән ғилем донъяһында өр-яңы асыш яһаны. Йомаҡтар йыйыу өсөн, М.А.Рыбникованың методикаһын файҙаланып, үҙенекен төҙөнө. Был уның принципиаль рәүештә үҙ ҡарашын фәндә раҫлауына бер асыҡ миҫал. Ғалимәнең хеҙмәттәре башҡорт халҡының үткәне, бөгөнгөһө һәм киләсәге хаҡында тәрән уйланырға мәжбүр итә һәм беҙ, ошо халыҡ вәкилдәре, халыҡ хәтерен түкмәй-сәсмәй йыйып, киләсәк быуындарға еткереүсе Фәнүзә Айытбай ҡыҙына мең рәхмәтлебеҙ. Төрлө кисәләрҙә осрашҡан саҡтарҙа беҙ ирем менән уны күреп ҡалырға, әңгәмәләшергә тырыштыҡ, сөнки аҡыллы кеше менән аралашыу үҙе бер асыш, оло ғүмер бит ул. “Башҡортто башҡорт итеп күтәргән апайҙарҙың, үҙҙәре иҫән сағында уҡ, арҡаһынан ҡағырға, хөрмәт күрһәтергә кәрәк!” — ти торғайны Аҫылғужа Ишем улы. Фәнүзә апай һәр ваҡыттағыса бик ябай, сабыр тәбиғәтле, йылмайып ҡына рәхмәтен белдерә лә, бер нисә тос фекерен әйтеп китә.

“Ҡешегә үҙгәрергә, ғәҙәти көнкүреште емереп, өйрәнелгән, ҡалыплашып бөткән фекерҙәрҙән арынырға, яңырырға кәрәк. Беҙ рухи ҡиммәттәребеҙ системаһы аша тирә-яғыбыҙҙағы ваҡиғаларҙы ҡабул итәбеҙ. Донъяға ҡарашыбыҙҙың айышын, үҙенсәлеген үҙебеҙ үк яҡшы аңларға тейешбеҙ, сөнки ошо мөнәсәбәтебеҙҙән тора бит беҙҙең тормош, беҙҙең асылыбыҙ”, — тигән фекерен йыш ишетергә тура килде.

Буш ерҙә орлоҡ шытмай, әлбиттә. Ҡайһы берәүҙәр автобиография яҙыуға кире мөнәсәбәттә. Һәр башланғыс шәхестән, уны үҫтергән ата-әсәнән башлана. Фәнүзә апайҙың булмышына боронғо Мораҙым ауылының бай тарихы, меркет-мең ырыуы башҡорттары хәтерендә һаҡланған рухи ҡомарҡылар менән хозурланып үҫеүе йоғонто яһай. Әммә ауыл ҡыҙының тырышлығы, тәрбиәлелеге, өйрәткәнде уңышлы һеңдерә белеүе, арымай-талмай маҡсатына ынтылыуы ата-әсәһенән килгәнен танымау мөмкин түгел. “Бындай тос аҡыл, таҫыллыҡ, бындай ҙа уңғанлыҡ, шул уҡ ваҡытта ябайлыҡ ҡайҙан килә икән?” — тигән һорауҙы уға биреп тә булмай, сөнки ғаилә мөхитенә, ата-әсә өлгөһөнә, халыҡ тәрбиәһенә, уҡыу йорттары һәм уҡытыусыларҙың белем биреү традицияларының ныҡлығына, нигеҙле булыуына күп нәмә бәйле икәнлегенә күптән инанғанмын. Тормошҡа, халыҡҡа, илеңә, эшләгән эшеңә мөхәббәт менән ҡарау, кешеләргә мәрхәмәтле булыу Фәнүзә Айытбай ҡыҙына хас күркәм сифаттар. Уның күңелендәге милли ихтыяж менән ижади рухиәт берлеге, эшенә етди, маҡсатлы ҡарашы, оло ғалимә булып та, һәр ваҡыт ябай, инсафлы була белеүе, үҙ теләгенә ирешкән кешенең йәшәү тәжрибәһе үтә әһәмиәтле.

Фәнүзә апайҙы бала саҡтан яратып-һөйөп үҫтергәндәр. Береһе — ҡатынын, икенсеһе ирен юғалтҡан Айытбай Миңнебай улы менән Минисара Әбделвәхит ҡыҙы бергә йәшәй башлай. 1936 йылдың ҡараңғы 7 февраль төнөндә тыуған ҡыҙҙарына ата-әсә, оҙон ғүмер, бәхетле тормош теләп, нәҙер әйтә: 10 йәшкә еткәнсе, башҡорт халыҡ йолаһын үтәп, төнөн донъяға килгән баланың һәр тыуған көнө һайын күрше Сумар ауылы муллаһына ҡара һарыҡ хәйер итеп бирергә. Әсәһе лә күҙ яҙлыҡтырмай үҫтергән ҡыҙын алты йәшенәсә күкрәк һөтөнән айырмай. Ҡыҙыҡай үҙе имсәк ташларға була һәм, Мәжит еҙнәһенең санаһына толопҡа уранып ултырып, күрше Юлдаш ауылына бер аҙнаға ҡунаҡҡа китә. Әсәһе: “Эй балаҡайым, ыҙаланып өҙгәләнәлер инде...” — тип илап, хафаланып көн үткәрә. Ҡолонсағы ҡайтҡас, күкрәгенә ҡыҫып ҡарай, әммә ныҡышмалы ҡыҙ башҡаса иммәй. “Һин ҡарама күләгәһендә, бөркөт (меркет) ҡанаты аҫтында үҫтең, улар һине тормош ауырлығынан һаҡлар, яңғыҙлыҡтан ҡотҡарыр, Аллаһы бирһә”, — тип үҙ-үҙен тынысландыра әсә.

— Иртән икенсе урында уянам да, гел атайым менән әсәйем уртаһына күсеп ятам да ҡуям. Улар ятһа-торһа: “Хоҙайым, тел аҫҡысы бир балаға! Һаулыҡ, ғүмер бир, мәрхәмәтеңдән ташлама, Аллам!” — тигән теләктәрен әйтмәй ҡалмайҙар ине. Миңә Ҡинйәбикә тип исем ҡушырға уйлағандар, әммә мәктәп директоры: “Маңлайы киң, аҡыллы булыр, Фәнүзә итегеҙ, мәғәнәһе матур — күренекле, данлы кеше”, — тигән. Шул исем миңә килешкәндер инде, — тип йылмая Фәнүзә апай. — Атайым мәктәптә бөтә хужалыҡ эштәрен алып барҙы, әсәйем өйҙә — оҫта хужабикә. Баҡсабыҙ ҙур булғас, бәрәңгебеҙ мул, атайым бесән күп әҙерләй, шуларҙы күрше мордва ауылында тормош-көнкүреш кәрәк-яраҡтарына алмаштыра. Атайым әсәйемдән 12 йәшкә оло булһа ла, бик татыу йәшәнеләр, тырышып, матур донъя көттөләр. Күмәк кеше араһында үҫтем.

Һуғыш осоронда Ленинградтан эвакуацияға ебәрелгән немец ҡатыны Эльза Вильмаровна Лаунштейн беҙҙә йәшәне, ғөмүмән, ауылға килгән күренекле кешеләр, артистар, уҡытыусылар, шәфҡәт туташтары, район хужалары беҙгә төшә торғайны. Атайым менән әсәйем кешеләрҙе яратты, үҙҙәре бер тәрбиә усағы инде. “Ҡеше хаҡына инмә! Ҡешене яманлама!”, “Ҡеше үҙен-үҙе белһә, йөрәге ярылып үлер ине”, “Ауыҙың тулы ҡара ҡан булһа ла, сит-ят алдында төкөрмә!“ — был әсәйемдең ҡат-ҡат ҡабатларға яратҡан нотоҡтары.

Фәнүзә апай 1950 йылда Мораҙым ете йыллыҡ мәктәбен тик яҡшы билдәләргә генә тамамлай. “Башта сибек кенә булһам да, аҙаҡ теремекләндем”, — тип көлә ул. 1954 йылда Стәрлетамаҡ педучилищеһын да яҡшы билдәләргә генә тамамлағас, үҙ ауылына ҡайтып, балаларға рус теле һәм әҙәбиәтенән белем бирә башлай. Зирәк ҡыҙҙы шунда уҡ күреп ҡалалар һәм 1955 йылда Ауырғазы районы комсомол комитетының мәктәптәр бүлеге мөдире итеп үрләтәләр. Фәнүзә Айытбай ҡыҙы тарих уҡытыусыһы булырға хыяллана һәм 1955 йылда Стәрлетамаҡ институтына ситтән тороп уҡырға инә. 1956 йылда, 1-се курс өсөн һынауҙарҙы алдан тапшырып, 2-се курстан көндөҙгө бүлеккә күсә. Ата-әсәһенең һаулығы насарайып киткәнлектән, уға 4-се курстан тағы ситтән тороп уҡырға тура килә, әммә тырыш ҡыҙ бөтә ауырлыҡтарҙы еңеп, 1959 йылда Стәрлетамаҡ педагогия институтын яҡшы билдәләргә генә тамамлай. Шул йылда уның Мәскәүҙә уҙғарылған Бөтә донъя йәштәр һәм студенттар фестивалендә ҡатнашыуы ғына ни тора!

Йәш белгес, тыуған ауылына ҡайтҡас, рус теле һәм әҙәбиәтенән уҡыта, директор вазифаһын да үтәй. Дәрестән тыш гел ғилем донъяһына тартылып йәшәй. Ҡыҙыл дипломлы йәш белгесте институт ректоры Солтанғужин саҡыртып алып, аспирантураға инергә тәҡдим итә, хатта Жәлил Ҡейекбаевҡа адресланған хат бирә. Шул хат менән 1959 йылда аспирантурала урын бармы-юҡмы, ҡасан һынау алалар икәнлеген белер өсөн Фәнүзә апай Өфөгә юллана. Башҡорт дәүләт университетының филология факультеты деканы, арҙаҡлы ғалим Жәлил Ғиниәт улы Ҡейекбаев әле генә институт тамамлап килгән ҡыҙҙы бик йылы ҡаршылай.

— Ниндәй тема өҫтөндә эшләргә теләр инең? — ти ул.

Рус һәм сит ил әҙәбиәтенә ғашиҡ ҡыҙ:

— Мин рус йә сит ил әҙәбиәте менән шөғөлләнергә теләйем. Инглиз яҙыусыһы Голсуорси ижады, йә Лев Толстойҙың Наташа Ростова образы тураһында яҙып ҡарау ниәтем бар ине... — ти.

— Сит ил әҙәбиәте менән шөғөлләнергә уларҙың үҙҙәренең дә ғалимдары етерлек, ә бына башҡорт ғалимдары аҙ. Әлегә урын юҡ. Алдағы йыл үҙемә кил, мин һине һынауһыҙ алам, — тип йыуатып сығара Жәлил Ҡейекбаев.

Ныҡышмалы ҡыҙыҡай, Фрунзе урамы буйлап аҫҡа төшөп барғанда, Карл Маркс урамында урынлашҡан СССР Фәндәр академияһының Башҡортостан филиалы урынлашҡан бик матур йортто күреп ҡала. “Фәндәр академияһы” тигән таҡтаны шул тиклем ҡыуанып, ғорурланып уҡый ҙа, инеп сығырға була.

— Әле алмаған булһа, Ҡирәй Мәргәнгә аспирант кәрәк ине, уға барып ҡара, — тигән кәңәш бирәләр.

Бына шулай ул 1959 йылдың октябрь айында Әхнәф Нури улы Ҡирәевтың аспиранты булып китә. Ирҙәр араһына бер ҡатын-ҡыҙ затын алыуының да үҙ сере бар. Баҡһаң, йәшлегендә ауыр тормош михнәттәре кисергән апай-

инәйҙәрҙе яҙылып китеп йырлап, бейеп күрһәттерер, оҙон-оҙон әкиәттәрҙе һөйләттерер, ҡобайырҙарҙы көйләттерер өсөн уртаҡ һүҙ табырҙай ябай, эскерһеҙ, ғилемле ҡатын-ҡыҙ кәрәк икән етәксегә. Ә Фәнүзә Айытбай ҡыҙы һеңлегә — апай, апайҙарға — әхирәт, инәйҙәргә тыңлаусан ҡыҙ булырҙай кеше лә инде.

Өс йыл аспирантурала уҡығандан һуң, 1962 йылдың 16 октябрендә, СССР Фәндәр академияһы Башҡортостан филиалы Тарих, тел һәм әҙәбиәт институты директоры Әхнәф Ибраһим улы Харисов уны кесе ғилми хеҙмәткәр итеп фольклор секторына эшкә ала. Ошо ваҡыттан башлап Фәнүзә Айытбай ҡыҙы бөтә ғүмерен институт менән бәйләй. Башҡорт халҡының оҙон көйҙәрен оҫта башҡарыусы һәм төплө өйрәнеүсе, публицист, әҙәбиәт һәм тел белгесе, этнограф тип танырға була Нәҙершинаны, әммә уның хеҙмәттәренең үҙәк өлөшө башҡорт халҡының ауыҙ-тел ижадын тәфсирләп өйрәнеүгә ҡайтып ҡала.

Июнь айында уҡ Ҡирәй Мәргән етәкселегендәге экспедиция Ырымбур өлкәһенең 30 ауылында булып ҡайта, унда 200-ҙән ашыу информанттан рухи ҡомартҡылар яҙып алына. 1962-лә — Силәбе, 1963-тә — Свердловск, Пермь өлкәләрендә, 1970 йылда — Ҡурған өлкәһенең Әлмән районында, 1988 йылда Ҡариҙел, Бөрө, Мишкә райондарында була ғалимдар. Ә 1989 йылда, экспедиция етәксеһе буларак, Фәнүзә ханым Әлшәй, Дәүләкән райондарына юллана. Бөтә тормошон халыҡ ижадын йыйып, өйрәнеп, халыҡҡа кире ҡайтарған ғалимәнең экспедицияларын һанап ҡына бөтөп булмай, ул һәр ваҡыт — халыҡ менән осрашҡан саҡта, ваҡытлыса ҡунаҡҡа барғанда ла ошо эш менән шөғөлләнә.

Экспедиция материалдары институт архивтарына ғына инеп ятмай, ҡат-ҡат тикшерелә, магнитофон таҫмаларын әленән-әле әйләндереп, яңынан тыңлана, башта мәҡәлә рәүешендә матбуғат биттәрендә яҡтыртыла, радио һәм телевидение аша уҡыусыға еткерелә, ғилми йыйынтыҡтарҙа баҫыла. Мәҫәлән, “Әбйәлил дәфтәре”, “Аҡ ҡайындар һәм зәңгәр күлдәр ерендә” (Ҡурған өлкәһе тураһында), “Халыҡ күңеленә сәйәхәт”, “Башҡорт көйҙәре, йырлы-бейеүле уйындар” (1996), Кәрим Дияров тураһындағы “Күңелдәре тулы моң уның”, “Рухи хазиналар эҙенән” (Асылыкүл, Дим, Өршәк буйы башҡорттарының фольклоры, 2 сериялы), Флүрә Ҡилдейәроваға арналған фильмдар һ.б.

— Экспедицияға йыйынған йә ҡайтҡан саҡтарҙа һәр ваҡыт Әхнәф ағай беҙҙе үҙ өйөнә йыйып ала, ҡатыны Мәғәфүрә апай беҙҙе һыйлай. Аш-һыу өҫтәле артында әллә күпме эштәргә башланғыс һалына, йомғаҡтар яһала. Етәксебеҙ һәр ваҡ нәмәгә — ят һүҙбәйләнештәргә, хатта ҡолаҡҡа ятмаған һүҙҙәргә лә иғтибарлы булырға өйрәтте, — тип хәтерләй Фәнүзә апай. Бер аҙҙан Ҡирәй Мәргән редакторлығында тәүге монографияһы донъя күрә.

Тормош гел аллы-гөллө сәскәләрҙән тормай шул. 1961 йылда атаһы, 8 айҙан әсәһе мәрхүм була. Йәш ҡыҙыҡай, үҙ-үҙен ҡайҙа ҡуйырға белмәй, аптыраштан Карпат яҡтарына мәҙәни сәйәхәткә сыға ла китә. Аңҡы-тиңҡе йөрөгәндә Мурманскийҙан килгән бик тәртипле Созинов Михаил тигән егет менән таныша. Ике йыл хат алышҡандан һуң, йәштәр Валентина Терешкова йыһанға осҡан тантаналы көндә өйләнешә. Бер йылдан ҡыҙҙары Ирина тыуа. Бәхетле ғаилә ике бүлмәле фатирға күсә. Ирина бөгөн нәҫел ауырыуҙарын тикшереүсе билдәле

биология фәндәре докторы, генетик. Кесе ҡыҙҙары Элла филология фәндәре кандидаты, башҡорт, рус һәм инглиз телдәренең дөйөм йә үҙенсәлекле оҡшаш һәм параллель яҡтарын тикшерә.

1962 йылда "Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу" эпосының тәү башлап матбуғатта күренеүенә 150 йыл тулыуға арналған Бөтә Союз фольклор конференцияһы уҙғарыла, унда йәш ғалимә "Женские образы в эпосе Кузы-Курпес" тигән темаға сығыш яһай. Ҡирәй Мәргән "Туй йолаһында сеңләүҙәр" тигән темаға диссертация яҙырға тәҡдим итергә уйлаһа ла, дуҫы, шағир Шакир Насыров, йәш кешенең был теманы һайлауын мөрхәтһенмәй. Шул сәбәпле тема үҙгәртелә һәм Фәнүзә Айытбай ҡыҙы 1971 йылда "Башҡорт фольклорының афористик жанрҙары" темаһына кандидатлыҡ диссертацияһы яҡлай.

Бөгөнгө көндә филология фәндәре докторы, Тарих, тел һәм әҙәбиәт институ-ты баш ғилми хеҙмәткәренең 40-тан артыҡ китап, 200-ҙән ашыу ғилми хеҙмәт авторы булып китеүе — тырышлыҡ, ныҡышмалылыҡ, егәрлелек, белемлелек һөҙөмтәһе.

Ф.Нәҙершина 1984—1990 йылдарҙа зәңгәр экрандарға "Йыр тарихы — халыҡ тарихы" тапшырыуҙар серияһын сығарып, йырҙар, уларҙың тарихи нигеҙле үҫеше, виртоуз формалары, текстар яҙмышы тураһында һүҙ алып барҙы. Уның әйткәндәрен беҙҙең данлыҡлы йырсыларыбыҙ Мәғәфүр Хисмәтуллин, Ғәли Хәмзин, Флүрә Ҡилдейәрова, Тәнзилә Үҙәнбаева, Рамазан Йәнбәковтар халыҡҡа йыр менән еткерҙеләр. Был тапшырыуҙар мәҙәниәтебеҙҙе киләсәк быуынға еткереүҙә баһалап бөткөһөҙ роль уйнаясағына ышанам, тик, ҡыҙғаныс, телевидениеның фонотека архивында улар һаҡланмаған икән. Матди етешһеҙлеккә һылтанып, ана шулай беҙҙең мәҙәниәт ҡомарҡылары киләсәк быуынға еткерелмәй ҡала. "Халҡыбыҙҙың оло рухи мираҫы... тарихи хәтергә иғтибарлы булған ата-бабаларыбыҙҙың изге аманаты тип ҡабул ителһә икән", — тип мөрәжәғәт итә беҙгә ғалимә бер китабында. Уның теләген ғәмәлгә ашырып, интернет аша бөтә ғаләм белерлек, ишетерлек мөмкинлек асырға ине лә бит!..

2000 йылда мин дә "Башҡортостан" гәзите редакцияһының мәҙәниәт бүлеге мөдире Флүзә Мырҙабаева үтенесе менән "Йырҙарыбыҙҙа — халыҡ тарихы" тигән рубрикаға бер нисә мәҡәлә яҙҙым.

Башҡорт халҡының рухи ҡомарҡыларын башҡа халыҡтарға танытыу теләге ғалимдар күңелен байтаҡтан өйкәп йөрөй. Институт заказы менән 1960 йылда Фәнүзә апай бер нисә башҡорт халыҡ эпосын рус теленә тәржемә итеп, Мәскәүгә ебәрә. Ул В.М.Жирмунскийҙың "Тюркский героический эпос" (Л., 1974) китабында айырым бүлек булып баҫыла. 1975 йылда Мәскәүҙә "Героический эпос народов СССР", Мөхтәр Сәғитов, Әхнәф Харисов, Адельма Мирбадалева әҙерләгән "Башкирский народный эпос" (1977) тупланмалары нәшер ителгәс, донъя ғалимдары башҡорт халыҡ эпостарын күберәк телгә ала башлай.

1985 йылда Сыктывкарҙа уҙғарылған VI Фин-уғыр халыҡ-ара конференцияһында Фәнүзә Айытбай ҡыҙы "Волга буйы һәм Көньяҡ Уралда йәшәгән төрки һәм фин-уғыр халыҡтары риүәйәттәрендә оҡшаш мотивтар" тигән тема менән сығыш яһай һәм ошо үҙенсәлектәр аша башҡорт халҡының гүзәл рухи ынйыларын башҡа илдәрҙәге ғалимдарға ишеттерә.

Тәржемә кеүек яуаплы эштә тел үҙенсәлектәрен, халыҡтың рухын, мәҙәни нескәлектәрен тойоп эш итергә кәрәк. Ул хаҡта халҡыбыҙҙың ауыҙ-тел ижадын рус теленә ауҙарыусы Ғәзим Шафиҡов бик матур итеп гәзиттә сығыш яһағайны. “Бер нәмә уйлайым, икенсене эшләйем, өсөнсөнө күҙ уңында тотам”, — тигәйне ул ошо ҡатмарлы эш тураһында. Һуңғы йылдарҙа Фәнүзә апай Нәҙершина етәкселегендәге коллективтың сит телдәргә тәржемә ителгән хеҙмәттәренең шуға күрә баһаһы икеләтә ҙур.

“Пословицы и поговорки. Приметы. Загадки” (Уфа, 1993) хеҙмәтен рус телендә нәшер итеп, Фәнүзә апай рухи ҡиммәттәребеҙҙе Рәсәй кимәленә күтәрҙе. Үҙе йыйған ҡомартҡыларҙың темаһына тәрән үтеп инеү; ишеткән-күргәнен мәҡәләләрендә һәм китаптарында йәнле итеп яҙып биреү; фәндәге төрлө ағымдарҙың, мәктәптәрҙең, бәхәстәрҙең һәм ҡапма-ҡаршылыҡтарҙың асылын белеп эш итеү, шул уҡ ваҡытта үҙ ҡарашын ныҡлы раҫлау; китаптарға инеш һәм баш һүҙ яҙыу, аңлатмалар биреү; коллегаларының һәм информаторҙарҙың хеҙмәтен баһалап файҙаланыу; башҡорт халҡының оҙон көйҙәрен төп нөсхәһендә өйрәнеү, кәрәк ерендә башҡарып күрһәтеү — былар бөтәһе лә Фәнүзә Нәҙершинаның мөһим эш алымдары.

— “Донъя халыҡтарының мифтары” тигән ике томлыҡ энциклопедияла (М., 1991, 1992) башҡорт фольклоры хаҡындағы мәғлүмәттәрҙең күренмәүе беҙҙе күптән борсой ине. Ә инде 90-сы йылдарҙа Лондонда сыҡҡан һүҙлектәрҙең береһендә “эпос” терминына ҡарата төрки халыҡтары фольклорынан килтерелгән миҫалдарҙың бер яҡлы булыуын күргәс, уйланылған идеяны тормошҡа ашырыу буйынса кисектермәҫтән эш башларға ҡарар ҡылынды. Артыҡ оҙаҡҡа һуҙырға тура килмәне, сөнки Бөйөк Британияла уҙғарылған “Центральная Азия, Ҡаспий” халыҡ-ара симпозиумына (1994) барырға йыйынғанда, башҡорт халыҡ йырҙарының ҡайһы бер үрнәктәре инглиз теленә тәржемә ителгәйне инде. Бына Эдинбургта ҙур трибуна артында торам, төрлө илдән килгән ғалимдарҙан, фольклорсыларҙан тыш, философтар ҙа бар. Ҡапыл юғалып ҡалдым. Үҙемде ҡулға алыр өсөн, тәҙрәгә ҡарайым. Тауҙар күренә. Сусаҡ тауҙар булмаһа ла, Уралды иҫемә төшөрҙө. Башҡорт халыҡ йыры “Урал”, уның тарихы, “Сыңрау торна” һәм ҡурай тураһындағы риүәйәттәрҙе һөйләп, көйҙәрен магнитофон таҫмаһынан ишеттереп, бурысымды матур ғына тамамлам ҡуйҙым. Эдинбургта уларҙы инглиз телле ғалимдарға күрһәтеп, ыңғай баһа алғас, ҡайтҡас та ныҡлы эшкә тотонолдо, — тип аңлатты Фәнүзә апай халҡыбыҙҙың рухи ҡомартҡыларын өс телдә нәшер итеү һәм оло донъяға сығарыу идеяһының барлыҡҡа килеүен.

1995 йылда данлыҡлы йырсыбыҙ Флүрә Килдейәрова менән берлектә әҙерләнгән “Халҡым йыры” йыйынтығы Беренсе Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы делегаттарына бүләк булараҡ нәшер ителә. Өс телдә нәшер ителгән был китап музыкаль дискыһы ла булыуы менән үҙенсәлекле.

Халҡыбыҙҙың аҫыл ҡомартҡыларын йыйып, өйрәнеп, уларҙы, хәтер яңыртыу өсөн, халыҡтың үҙенә баҫма рәүештә ғилми аңлатмалары менән кире ҡайтарыу, аҫыл өлгөләр менән башҡа халыҡтарҙы таныштырыу маҡсатында өс телдә китаптар нәшер итеү традицияһы ана шулай фәнгә йылдам индерелә башлай.

— Халҡыбыҙҙың донъя күләменә сығарырҙай бөйөк ижады, бай рухи мираҫы булыуына ҡыуанам, бәхет тойғоһо кисерәм. Дөйөм кешелеккә хас

ҡараштар системаһы тыуҙырыуға үҙ өлөшөн индергән ата-бабаларыбыҙҙың аҡыл ҡеүәһенә әленән-әле һоҡланам, — ти Фәнүзә апай Нәҙершина.

1996 йылда Фәнүзә апай ирен юғалтты, әммә бөгөлөп төшмәне. Тормош ауырлыҡтарын хеҙмәт менән еңде. Юғары әҙерлекле белгестәрҙе тәржемәгә ылыҡтырып, бер-бер артлы “Башҡорт халыҡ йырҙары, йыр-риүәйәттәре” (Өфө, 1997), 2001 йылда өҫтәлмә тираж менән “Башҡорт халыҡ риүәйәттәре һәм легендалары”, ҡыҙы Элла менән берлектә “Башҡорт, инглиз, рус телдәрендәге оҡшаш мәҡәлдәр һәм әйтемдәр” (Өфө, 2002) хеҙмәттәрен донъяға сығара. Ә ике тапҡыр нәшер ителгән “Урал батыр” эпосы (Өфө, 2003, 2005) мәҙәни донъябыҙҙа яңы йүнәлеш яһалғанлығын раҫлай. Сәсән Мөхәмәтша Буранғолов яҙып алған шиғри (поэтик) версияның башҡорт, рус телдәрендәге баҫмаһын филология фәндәре докторы, профессор Сәғит Ғәли улы Шафиҡов инглиз теленә тәржемә итә. Фәнүзә апай Нәҙершина шумер-аккадтарҙың “Авеста”, финдарҙың “Калевала”, боронғо германдарҙың “Эдда”, “Беовульф”, ҡырғыҙҙарҙың “Манас” кеүек поэзия ҡомартҡылары дәрәжәһендәге “Урал батыр” эпосын бөтә ғәләмгә сығарып, бик ҙур батырлыҡ эшләне.

Эпостарҙың сәсмә һәм шиғри версиялары, шартлы ҡыҫҡартмалар, өс телдәге һүҙлек, географик атамалар теҙмәһе, әҫәрҙәрҙә урын алған мотивтар, яҙҙырыусылар (информанттар), яҙып алыусылар, тәржемәселәр исемлеге, библиографик белешмә — былар бөтәһе лә ғалимәнең халыҡ ижадын ни тиклем тәрән, нигеҙле өйрәнеүен күрһәткән миҫалдар. Уларҙың ата-бабаларыбыҙҙың мифологик ҡараштарын тасуирлағандары, төрлө дәүер эҙҙәрен һаҡлаған ижтимағи, тормош-көнкүреш хәл-ваҡиғаларын художестволы сағылдырғандары бигерәк тә ҡәҙерле. Башҡорттоң аҫаба, ерле халыҡ булыуын, Уралда борондан көн итеүебеҙҙе раҫлаусы мөһим дәлилдәр. Шуны ла әйтергә кәрәк, Фәнүзә апай ҡабатланырға яратмай: уның һәр китабы ниндәйҙер өҫтәлмә менән яңыра, уға тиклем экспедицияла булып ҡайтҡан фольклорсыларҙың, рус ғалимдарының хеҙмәттәре, институт архивы материалдары менән сағыштырыла һәм тулылана бара.

2004 йылда Салауат Юлаевтың тыуыуына 250 йыл тулыу айҡанлы батырыбыҙҙың персональ энциклопедияһын төҙөгәндә, Фәнүзә апай менән юлдарыбыҙ йыш киҫеште. Хәҙер ул — “Башҡорт энциклопедияһы”ның төп һәм даими эшләүсе авторҙарының береһе. Быны менән генә сикләнеп ҡалмай, нисә быуат халыҡ теленән төшмәгән Салауат Юлаев образы менән донъя халыҡтарын таныштырыуҙы маҡсат итеп ала. “История башкирского народа” томдарын әҙерләүҙә лә ҡатнаша.

Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайына делегат итеп Фәнүзә Айытбай ҡыҙы Балтас районынан күрһәтелә. Ғалимә бөйөк батырыбыҙға һәм балтастарға рәхмәт йөҙөнән ике томлы “Салават в башкирском фольклоре” (Өфө, 2008) тигән хеҙмәтен бүләк итте. Был ысын мәғәнәһендә фундаменталь хеҙмәт. Фәнүзә Нәҙершина 1987 йылда республиканың Салауат Юлаев исемендәге Дәүләт премияһы лауреаты исемен яулаһа, һуңғы хеҙмәттәре өсөн Башҡортостандың атҡаҙанған фән эшмәкәре (2000), Салауат Юлаев орденын алды.

Фәнүзә апайҙың ижади ҡомары һәм фантазияһы сикһеҙ: 2010 йылда ул “Башҡорт халыҡ ҡобайыр-иртәктәре” йыйынтығын өс телдә, ә риүәйәт, легенда, йомаҡ, әйтемдәрен, башҡорт мифологияһы хаҡындағы мәҡәләләрен төрөк телендә нәшер итте.

Ғалимәнең бай ғилми хеҙмәттәре менән танышҡан һәр уҡыусы уның башҡорт демографияһына, топонимикаһына, тел байлығына, тарихи үткәненә һәм бөгөнгөһөнә вайымһыҙ булмауын шәйләр. “Октябрь революцияһына тиклем Минзәлә, Бөгөлмә өйәҙҙәрендә башҡорттарҙың һаны 200 мең булһа, 1989 йылғы халыҡ иҫәбендә Татарстанда 19,1 мең башҡорт теркәлгән. 1964 йылғы экспедиция материалдары күрһәтеүенсә, ҡайһы ауылдар — башҡорт, ҡайһыһы — ҡатнаш, ҡайһылары аҫаба йәки припущенниктар, ниндәй ырыу тармағы йә ниндәй ара икәнлеген улар белгәндәр. Милли мәҙәниәтте үҫтереү, үҙ туған телдәрендә уҡытыу төбәк зыялыларының һәм урындағы халыҡтың ҡулынан килмәҫтәй эш түгел дә баһа”, — тип борсола ғалимә.

...Йәмәлекәй тауға барып булмай,
Тирә-яғы — кордон, ҡарауыл.
Йәмәлекәй тауҙы һатҡан, тигәс,
Йыйылышып илай бар ауыл...

Фәнүзә апай башҡарған “Йәмәлекәй” тигән оҙон көй ҡолаҡта сыңлап, йәнде өҙгөләй, сөнки Йәмәлекәй тауы янындағы тәбиғәтте бер күрһәң, онотоу мөмкин түгел. Бөгөн, шәхси милек тигән хәйләле сәйәси кәртәләр ҡоролған заманда, йән әсеүе кимәлен билдәләүе ҡыйын. Ул йөрәгебеҙ түрендә генә тора. Нәҙершина апай: “Мин сәйәсмән дә, йырсы ла түгел”, — тиһә лә, ул — үҙ иленең гражданы, халҡын, ерен, уның тарихын, мәҙәниәтен яратҡан шәхес. “Ихтилалдар, репрессия, һуғыш михнәттәре лә башҡортто рухи яҡтан һындыра алмаған да баһа, ата-бабаларыбыҙ телен дә, мәҙәниәтен дә, тарихын да һаҡлаған. Бөгөн килеп ни эшләп маңҡортланалар икән?“ — тигән борсоулы уйҙар ғалимәне бер ваҡытта ла ташламай.

Фәнүзә Айытбай ҡыҙы төрлө өлкәлә эшләй, Әлшәй, Дәүләкән райондары халҡы менән бергә төшөрөлгән фильм шуға асыҡ миҫал. Әбйәлил районы сәсәне Гөлнур Мамлееваның һуғыш рухын тасуирлаған ритуал бейеүе күптәрҙе уйландырғандыр, моғайын. Уны бит Бөйөк Ватан һуғышы яугирҙары ла атака алдынан башҡарғандар. Хәҙер бейеү халыҡ хәтеренән юйылған, сөнки һуғыш рухын борсорға ярамай, тиҙәр. Был бейеү хаҡында Ф.Нәҙершинаның монографияларында, мәҡәләләрендә ғилми аңлатмалар бирелә.

— Фольклор — ул халыҡ әҙәбиәте, халыҡтың рухи мәҙәниәте, ҡараштары, халыҡ философияһы ла. Ул бик киң даирәне солғай. Тарих фәнен электән ярата инем, ә фольклорҙың нәҡ тарих менән бәйләнеше бар, унда халыҡ аңының үҫеш этаптары сағыла, — ти ғалимә. Бына шуның өсөн беҙ бөгөн уны, Фәнүзә Айытбай ҡыҙы Нәҙершинаны, оло ғалимәне, музыка, әҙәбиәт белгесе, публицист, сценарист, этнограф, телсе һәм тарихсы, ауыҙ-тел ижады ҡомартҡыларын йыйыусы, уларҙы төрҙәргә, жанрҙарға бүлеп, текстарын барлаусы, тәржемә итеүсе, анализлап пропагандалаусы, халыҡ хәтерен һаҡлаусыларҙың исем-шәрифтәрен аҡ ҡағыҙға төшөрөп данлаусы, рухи ҡомартҡыларыбыҙҙы бар донъяға билдәле итеүсе, фән донъяһының яҡты йондоҙо тип таныйбыҙ һәм тормошобоҙҙа әҙ генә булһа ла унан өлгө алырға тырышабыҙ.